Әхлаҡ

ТАТЫУ ЙӘШӘЙЕК!

Ғүмәр НӘБИУЛЛИН

Мөхәммәт бәйғәмбәр (сас) мосолмандарҙы: "Бер-берегеҙ менән араларҙы өҙмәгеҙ, бер-берегеҙгә арҡа менән боролмағыҙ, үҙ-ара күрә алмауҙан баш тартығыҙ, бер-берегеҙҙән көнләшмәгеҙ һәм ҡәрҙәштәр булығыҙ, эй Аллаһ ҡолдары!" - тип өндәгән. (Бохари, "Әҙәп", 57, 58, 62; Мөслим "Бирр", 23, 24 , 28). Кеше йәмғиәтһеҙ йәшәмәй. Беҙ үҙебеҙҙе йәмғиәт тормошона реалләштерергә ынтылабыҙ. Әммә ундағы бәхет һәм тойғо, кисереш хәле мөхиттең ни тиклем сәләмәт булыуынан тора. Әгәр ҙә беребеҙҙә ниндәй ҙә булһа проблема йә ҡыйынлыҡтар тыуһа, икенсебеҙ шунда уҡ уны үҙендә тоясаҡ һәм уны бөтәһе менән бергә бүлешергә мәжбүр, ни өсөн тигәндә йәмғиәт потенциалы - һәр беребеҙҙең ҡаҙанышы. Бәйғәмбәрҙең (сас) был йәһәттән ошондай фекере бар: "Диндар кешеләр яратҡан, йәлләгән һәм шәфҡәт күрһәткән ваҡытта бер кәүҙә кеүектәр; бер ағза ауырыһа, ауыртыныу бөтә тәндә солғап ала". Һәм тағы ла: "Диндар менән диндар бер-берегенә бинаның таштары кеүек бәйләнгән". Аҙактан Аллаһ илсеһе (сас) ҡул бармаҡтарын бергетеп, был бәйләнеште күрһәткән.

Бөгөнгө әхлаҡ нормаларын һәр кем үҙенсә аңлай һәм әхлаҡтың фәҙеллек, бәхет тураһында үҙенең шәхси ҡуҙаллауҙарына тура килгән яғын ғына һайлай. Шуға күрә лә бөгөн йәмғиәт тормошоноң бөтә өлкәһендә лә йәмғиәтебеҙ өсөн дә, динебеҙ өсөн дә зарарлы килешмәүсәнлек, кешеләрҙең берберенһен анламауы күҙәтелә. Диндар кешеләр бер-берененә ярҙам итмәй: бер ҡәрҙәш тормоштан уңған ҡәрҙәшенә көнләшә һәм, киреһенсә, уның ҡайғыларына ҡыуана. Мосолмандар, туҡтағыҙ! Уйланығыҙ! Беҙҙең Бәйғәмбәребеҙ (сас) нимәгә өйрәтте, иҫләгеҙ - Ҡөрьәнгә ҡайтығыҙ!

Мосолман йәмғиәте нык булырға тейеш - был турала Ҡөрьәндең күп аяттарында әйтелә. Шулай уҡ Аллаһ илсеһе шундай ҡәрҙәшлекте тәҙөү ысулдары тураһында әйткән. Йыш ҡына ул, беҙ бөтәбеҙ ҙә ябай кешеләр һәм беҙҙең арала тәрлә аңлашылмаусанлыҡтар килеп сығыуы тураһында әйткән. Шуға ҡарамаҫтан, мосолман килеп тыуған хәлдә көсәйтергә түгел, ә Аллаһ бүлдырған ҡағиҙәләргә таяныр аңлашыуға килергә тырышырға тейеш. Бәйғәмбәрҙең (салаллаһу ғәләйһи вә сәлләм) хәҙистәре ярҙамында кешеләргә ижтимағи мөнәсәбәттәрҙә таркалыуҙарҙан ҡасыу юлы күрһәтелгән. Ислам беҙгә үсегеү һәм ирешеүҙән Аллаһы Тәғәлә тарафынан билдәләнгән асыҡ ваҡытын күрһәтә - өс көн. Был турала - Бәйғәмбәребеҙҙең (сас) хәҙисендә: "Мосолманға үҙенең ҡәрҙәшен өс көндән артыҡ ташларға рөхсәт ителмәй, ошо ваҡыт эсендә улар осрашҡан ваҡытта бер-берененә йөҙҙәрен ситкә борорҙар, ә был икеүҙең иң яҡшыһы, беренсе сәләм биргәне булыр". Йәки тағы ла: "Үҙенең ҡәрҙәшен бер йылға ташлаусы, уның ҡанын ҡойоусыға тиң булыр".

Мөхәммәт (сас): "Бер-берегеҙ менән арағыҙҙы өҙмәгеҙ, бер-берегеҙгә арҡа менән боролмағыҙ, үҙ-ара күрә алмауҙан баш тартығыҙ, бер-берегеҙҙән көнләшмәгеҙ һәм ҡәрҙәштәр булығыҙ, эй Аллаһ ҡолдары!", - тигән. Ләкин барыбер мосолмандар араһында аңлашылмаусанлыҡ килеп сыға икән - быға ҡарата Аллаһ ошондай бойороҡ ебәрә: "Мосолмандар ике төркөмгә айырылып, һуғыша башлаһалар, уларҙы татыулаштырығыҙ. Берәһе башлап фәҙелһеҙ һөжүм итһә, Аллаһ ҡушҡанса ғәмәл итә башлағанға саҡлы, шул яҡҡа ҡаршы һуғышығыҙ. Буйһонһалар, ғәҙеллек менән татыулаштырығыҙ. Һәм һәр эштә ғәҙел булығыҙ. Шик юҡ, Аллаһ ғәҙел ғәмәлдәрҙе ярата" ("Хужурәт", 9) Был аят менән Аллаһы Тәғәлә йәмғиәттә ике төркөмгә бү-ленгән мосолмандар араһындағы ҡаршылыҡты сисеү тәртибен һәм уларҙы, дуҫлаштырыу юлын күрһәткән. Бер һүҙ менән әйткәндә, ниндәй генә сәбәптәр арҡаһында бәхәс сыҡмаһын, ул беренсе Аллаһы Тәғәлә тарафынан ҡарала.

Бынан башҡа, Мөхәммәт (сас) бәхәсле кешеләрҙе шулай иҫкәртә: "Дүшәмбе һәм Кесеаҙна көндәре Аллаһы Тәғәләгә ҡолдарының эштәре күрһәтелер. Ҡәрҙәштәре менән араларҙы өҙеүселәрҙән башҡа, тик Аллаһҡа ғына табыныусы һәр ҡолоноң гонаһтары ғәфү ителә. Шул ваҡыт: "Был икәү татыулашҡансы көтөп торогоҙ", - тигән тауыш ишетелер" (Мөслим, "Бирр", 36). Ысынлап та, көндәлек тормошта төрлө бәхәстәр килеп сығыуы мөмкин, улар ике яҡ араһында дошманлыҡ тыуҙыра. Ҡөрьәндә әйтелә: "Изгелек менән яманлыҡ бер булмаҫ. Һин яманлыҡты изгелегең менән баҫ. Шулай итеп ғәмәл ҡылғанда, икегеҙҙең араһындағы дошманлыҡ бөтәр, һеҙ дуҫлашырһығыҙ" (Фусиләт, 34).

Мосолмандарға шулай уҡ ғәйбәттәрҙән һәм юҡ-бар һүҙҙәрҙә - бәхәс һәм ireш-талаш сығанаҡтарынан ҡасырға кәңәш ителә. Шулай ҙа, әгәр ике йәки унан да күберәк мосолмандар талаша башланы икән, быны тиҙерәк туҡтатырға кәрәк. Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә әйтә: "Килешеү һәр ваҡыт хәйерлерәктер" ("Ниса", 128).

Күп аяттары менән Ҡөрьән беҙҙе дуҫлашырға һәм талашҡан ике яҡты килештерергә саҡыра, бының өсөн һәр мосолман яуаплы булырға тейеш, сөнки был уның рухи вазифаһы. Шулай уҡ, дуҫлашыу һәм бер-берендә аңлау ғаиләлә уҡ үтәлергә тейеш - был Аллаһы Тәғәләнең ниғмәтелер. Дошманлашыусы ике яҡты яраштырыусы булырға Бәйғәмбәребеҙ (сас) саҡырған һәм үҙе лә быны тайпылышһыҙ башҡарған. Бер ваҡыт Мөхәммәт (сас) үҙене сәхәбәләренә ошо һүҙҙәр менән өндәшкән: "Һеҙгә доғанан, ураҙанан, хәйерҙән дә хәйерлерәк нәмә тураһында әйтергәме?" Улар: "Әйе, эй Аллаһтың илсеһе", - тип яуап биргәндәр. Шул ваҡыт ул: "Бер-берегеҙҙе татыулаштырығыҙ, юғиһә араларҙы боҙоу динде ҡаҡшата" (Тирмизи, "Сифатуәль-Ҡыяма, 56). Ә бер ваҡыт Ҡубала йәшәүсе ансарҙар ҡәбиләһендә, Мәҙинәнең тирәяғында шундай бәхәс тыуған, кешеләр хатта бер-берененә таш ташлай башлаған. Был турала белгәс, бәйғәмбәребеҙ (салаллаһу ғәләйһи сәләм) сәхәбәләренә: "Әйҙәгеҙ барып, уларҙың мөнәсәбәтен яйға һалайыҡ", - тигән, һәм улар бөтәһе бергә Ҡуба яғына йүнәлгәндәр.

Икенсе бер хәҙистә ир менән ҡатын йәки бер-береһе менән талашҡан ике мосолманды дуҫлаштырыуҙың мөһимлеге тураһында әйткән: "Улар өсөн хәйләләшергә барған, ике кешене дуҫлаштырған кеше алдаҡсы булып һаналмай". Шуға күрә дуҫлаштырыр өсөн изге ниәт хуплауға лайыҡлы: "Йәшерен кәңәштәрҙең күбеһенең файҙаһы юҡ. Саҙаҡа биреү, кешеләрҙе татыулаштырыу тураһында һөйләшкәндәр былар һаныңа кермәй. Аллаһтың хуплауын теләп, ошо эштәрҙе башҡарған кешегә Беҙ оҙаҡламай олуғ әжер бирәсәкбеҙ" (Ниса, 114).

Ҡөрьән һүҙҙәренән дуҫлаштырыуҙың әһәмиәте нисек юғары хуплаһа, шулай уҡ ҙур гонаһтар рәтенә ингән ғәйбәттәр ҙә тәрән ғәйепләнә. Аллаһ илсеһе иҫкәртә: "Ғәйбәтсе ожмахҡа инмәҫ". Шуға күрә, "Аллаһҡа һәм уның Рәсүленә буйһоноғоҙ, үҙ-ара ғауғалашмағыҙ, юҡһа, рухығыҙ, төшөр һәм ҡеүәтегеҙ китер. Түҙегеҙ! Аллаһ түҙемлеләр янында ("Әнфәл", 46).

РИЗЫҒЫБЫҘ ХӘЛӘЛ БУЛҺЫН!

Әминә ЗӘЙНУЛЛИНА

Баҙар, магазин кәштәләренә күҙ йөгертеп үтһәк тә, һуңғы йылдарҙа илебеҙҙә хәләл ризыҡтар киң тарала барыуын аңларға мөмкин. Әгәр Рәсәйҙә 20 миллион мосолман йәшәгән иҫәпкә алһаҡ, был күренешкә ғәжәпләнергә кәрәкмәйҙер. Башҡортостан Диниә назараты янындағы "Хәләл" стандарты буйынса комитет вәкилдәре илебеҙ кимәлендә хәләл ризыҡтарҙы етештереүселәрҙең һанын арттырыу, был ризыҡтарҙың сифатын күтәреү халыҡтың иғтибарын йәлеп итеү маҡсатында ошо йүнәлеш буйынса әленән-әле төрлө саралар уҙғарып тора. Күптән түгел Өфө ҡалаһында хәләл ризыҡтар буйынса тәүге "Ufa Halal 2011" төбәк ара конкурс дегустацияһы булып үтте. Конкурста ҡатнашырға республикабыҙҙан ғына түгел, ә сит өлкәләрҙән дә төрлө ойошмалар, шәхси предприятиелар килгәйне. Улар халыҡ иғтибарына ит, һөт, ҡамыр ризыҡтары тәҡдим итте. Араларында хатта хәләл бал, ҡымыҙ, дауаланыу өсөн ҡулланыла торған хуш еҫле майҙар етештереүселәр ҙә бар ине.

- Хәләл ризыҡтың башҡа ризыҡтарзан өҫтөнлөгө күберәк, - тип һанай Башҡортостан Республикаһының Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитеты етәксеһе Илдар Әхмәтшин, - Уны етештереүҙә кешенең сәләмәтлегенә зыян килтерерлек төрлө ҡатнашмалар, химик матдәләр, тәмләткестәр ҡулланыу рөхсәт ителмәй.

Бер нисә ризыҡ төрө буйынса уҙғарылған конкурста иң яҡшы ризыҡтарҙы билдәләү өсөн төҙөлгән махсус эксперт төркөм ризыҡтарҙы тәме, еҫе, төҫө, нисек теленеүенә ҡарап билдәләне. Еңеүселәр дипломдар менән бүләкләнде һәм үҙҙәренең тауарзарында конкурс эмблемаларын ҡулланыу хоҡуғын алды.

Һөйөклө Пәйғәмбәребез (сас): "Кем ҡырҡ көн хәләл ашап, хәләлдән аҙыҡланһа Аллаһ уның ҡәлебен нурлы ҡыла үә уның һөйләгән һәр бер һүҙе хикмәтле булыр", - тигән. Бер риүәйәттән хәбәр ителеүенсә, Сәғит ибн Әбү Вәккәс Рәсүлү әкрәмдән (сас) үҙҙәре хаҡында Аллаһы Тәғәләнән доға ҡылыуын һорап: "Минең доғам ҡабул булһын өсөн доға ҡылығыҙ, йә Аллаһтың Рәсүле", - тигән. Шул ваҡыт Рәсүлуллаһ ул кешегә: "Ашай торған ризығың хәләлдән булһын, шул ваҡытта доғаң һис шикһеҙ ҡабул булыр", - тип яуап биргән. Тағы ла: "Кем хәләлдә михнәттәр кисеп арып тапһа, гонаһтары кисерелгән хәлдә таң аттыра, Аллаһы Тәғәлә унан риза була", "Инсан тәнендә хәрәмдән ҡунған ит өсөн лайыҡлы урын - йәһәннәмдер", - тиелә хәҙистәрҙә.

Илебеҙҙә хәләл ризыҡтар етештереүсе ойошмаларҙың артыуы, уларҙың үҙ эшенә яуаплы ҡарауы, мосолмандарҙың талаптарын күҙ уңында тотоуы ҡыуаныслы күренеш. Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты янындағы "Хәләл" стандарты буйынса комитет әленән-әле тикшереүҙәр уҙғарып торғанға күрә, магазиндарҙы, баҙарҙарҙа һатылған, үҙебеҙҙә етештерелгән "Хәләл" маркалы ризыҡтарҙы шикләнмәй алырға мөмкин.